Ғилем һәм ғәмәл

Ишморат хәҙрәт

# ИМАНДЫҢ АЛТЫ ШАРТЫ

## 6-се дәрес

**(Башы 11-13 һанда).**

**Аллаһы Тәғәләнең тәҡдиренә, йәғни яҙмышҡа ышаныу.** Тәҡдиргә (яҙмышҡа) ышанмаған кеше мосолман булып һаналмаҫ. Тәҡдир - Аллаһы Тәғәләнең бөтөн барлыҡ нәмә өсөн алдан әҙерләгән яҙмышы. Ҡөрьәндә лә, Сөннәттә лә тәҡдиргә ышаныу кәрәклеге тураһында күп әйтелгән. Мәҫәлән, Аллаһы Тәғәлә шулай ти: "Беҙ һәр нәмәне тәҡдир менән барлыҡҡа килтерҙек". Шулай уҡ: "Аллаһтың бойороғо тәҡдир булды", йәғни, алдан билдәләнде. Шулай уҡ Ҡөрьәндә әйтелә: "Ниндәй генә бәлә-ҡаза килһә лә, ул тик Аллаһтың рөхсәте менән генә килә. Аллаһҡа иман килтергән кешенең күңелен Аллаһ тура юлға ебәрә. Ул бар нәмәне лә белә".

Бер көн Ғүмәр ибн Хаттабтың улы Абдуллаһҡа (Аллаһ уларҙан риза булһын) бер төркөм кешеләр тураһында һөйләнеләр. Ул кешеләр белем арттырырға теләп Көрьән уҡыйҙар икән, ләкин тәҡдиргә ышанмайҙар, яҙмыш юҡ, тиҙәр. Былар тураһында Абдуллаһ ибн Ғүмәр шулай ти: "Уларҙы осратһаң, әйт: "Ғүмәр улы Абдуллаһ ант итә: әгәр улар Өхөд тауы хәҙәр алтын сарыф итһәләр ҙә, әммә тәҡдиргә ышанмаған булһалар, Аллаһ уларҙың бер эшен дә ҡабул итмәйәсәк".



Тәҡдиргә (яҙмышҡа) ышаныу бер нисә төшөнсәнән барлыҡҡа килә:

Беренсенән, Аллаһы Тәғәләнең белеме бар нәмәне лә солғап алған. Аллаһы Тәғәлә белмәгән бер нәмә лә юҡ. Аллаһы Тәғәлә бөтә нәмә тураһында ла уларҙың бөтә нескәлектәренә тиклем белә. Һәм Аллаһы Тәғәлә ошо белгән нәмәләрен билдәле урынға яҙып ҡуйған, был урын "һаҡлаулы таҡта" ("Әл-ләүхүл-мәхфүҙ") тип атала. Мәҫәлән, минең ошо дәрестәрҙе яҙып ултырыуым, һеҙҙең уҡып ултырыуығыҙ - былар шул таҡтаға алдан уҡ яҙылған булған, тимәк. Һеҙҙең кисә нимә ашағанығыҙ, иртәгә һеҙҙең менән нимә буласаҡ - былар ҙа шунда яҙылып ҡуйылған, былар барыһы да Аллаһҡа күптән билдәле.

Икенсенән, бөтөн булған нәмә фәҡәт Аллаһы Тәғәләнең әмере менән генә була. Бер нәмә лә Аллаһы Тәғәләнең ихтыярынан тыш булмай. Бер япраҡ та, Аллаһтың әмере булмайынса, ағастан өҙөлөп төшмәй. Аллаһы Тәғәлә Ҡөрьәндә әйтә: "Аллаһтың күктәрҙә һәм ерҙә булған нәмәләрҙе белгәнен һин белмәйһеңме ни? Ысынлап, улар барыһы ла китапҡа (йәғни, һаҡлаулы таҡтаға) яҙылып ҡуйылған. Ысынлап, был Аллаһҡа бик еңел". Беҙ бер ҡасан да, Аллаһ теләмәгән нәмә булды, тип әйтергә тейеш түгелбеҙ (бынан Аллаһ Үҙе һаҡлаһын!) кемделер үлтерҙеләрме, кемдер үлдеме, нимәләр урландымы, кемдер ауып киттеме - былар барыһы ла Аллаһы Тәғәлә ҡушыуы буйынса. Уның ирке, Уның ихтыяры менән. Ләкин, шул уҡ ваҡытта, кешенең дә ихтыяры бар. Беҙ, тәҡдиргә һылтанып, кәрәкле нәмәләрҙе эшләмәй ултырырға тейеш түгелбеҙ. Улай иткән кешеләр, тимәк, диндә дөрөҫ аңламай. Мәҫәлән, мин ниндәйҙер насарлыҡ эшләйем икән, "Миңә был яҙылған" тип, тәҡдиргә һылтанып ултырыуым ярамай. Был шайтан беҙҙе шулай алдай. Беҙ бит тәҡдиребеҙгә нимә яҙылғанын белмәйбеҙ, тимәк, бер нәмәгә ҡарамай, яҡшы эштәр эшләргә, хәлебеҙҙе яҡшыртырға ынтылырға тейешбеҙ. Тәҡдир - ул Аллаһы Тәғәләнең сере, һәм беҙгә уны аңларға тырышып, төпкә ҡаҙыныրға ярамай (был турала Мөхәммәт пәйғәмбәр ғәләйһиссәләм ҡаты кисәткән). Беҙгә тейешле нәмә - ул тырышыу, ә ҡалғанын Аллаһ бирә.

Эйе, Аллаһы Тәғәләгә барыһы ла билдәле, һәм барыһы ла яҙылып ҡуйылған. Ләкин был, кешене нимәгәлер көсләү, тигәнде аңлатмай. Хаҡ хәлифә Ғүмәр ибн Хаттаб (Аллаһ унан риза булһын) тураһында шундай бер хикәйә һөйләнелә. Ул бер мәл бер бурҙы тотоп алып килде һәм шәриғәт ҡушҡанса уның ҡулын киҫергә әмер итте. Был бур: "Эй хәлифә! Мин бит быны Аллаһтың тәҡдире менән эшләнем, минең урлауым - ул Аллаһтың ҡушыуы", - тип аҡланырға тырышты. Ғүмәр хәлифә уға шулай тине: "Һин Аллаһ тәҡдире менән урлағанһың икән, мин һинең ҡулыңды Аллаһ тәҡдире менән киҫәсәкмен". Уйлана белгәндәр был хикәйәнән, әлбиттә, ғибрәт алыр.

Аллаһы Тәғәлә беҙгә нимә ҡушҡан, беҙ, бер нәмәгә лә һылтанмайынса, шуларҙы эшләргә ынтылырға тейешбеҙ: намаҙ уҡырға, ураҙа тоторға, төрлө яҡшы ғәмәлдәр ҡылырға, харамдан тыйылырға. Ә тәҡдир - ул Аллаһтың сере. Бер ғалим әйткән: "Мин тәҡдир (яҙмыш) тураһында күп уйланым һәм шуны аңланым: уның турала күберәк һөйләгән кеше уны, тәҡдирҙе, әҙерәк аңлай, ә уның турала әҙерәк һөйләгән кеше уны яҡшыраҡ аңлай".

Шулай итеп, беҙ имандың алты рөкөнөн үттек. Беренсеһе - Аллаһы Тәғәләгә ышаныу, икенсеһе - Уның фәрештәләренә, өсөнсөһө - Уның китаптарына, дүртенсеһе - пәйғәмбәрҙәренә, бишенсеһе - Ҡиәмәт көнө булаһағына, һәм алтынсыһы - Аллаһы Тәғәләнең тәҡдиренә, йәғни яҙмышҡа. Ошо алты шартты беҙ яттан белергә тейешбеҙ һәм быларҙың береһен дә инкар итергә тейеш түгелбеҙ.



# НИМӘ УЛ ФАРЫЗ?

Ул, мотлаҡ үтәлергә тейешле, тигәнде аңлата. Был категорияға ҡараған ғәмәлдәрҙе үтәүсе - сауаплы, үтәмәгән гонаһлы булыр. Әлбиттә, ғәмәлдәрҙе үтәмәүҙең ғәфү итерлек сәбәбе лә булыуы мөмкин. Әммә был - икенсе мәсьәлә. Түбәндә билдәләнгәндәр һау, аҡылы зәғиф булмағандар өсөн икәнлеген иҫәпкә алығыҙ. Был ғәмәлдәрҙең фарыз булыуына ышанмаған кеше диндән сыға.

Фарыз ғәмәлдәр "фарыз айн" һәм "фарыз кифая" төркөмдәренә бүленә. Тәүгеһен бөтә мосолмандар ҙа үтәргә тейеш, ә инде фарыз кифая мосолман өммәһенә һалына. Мәҫәлән, ҡайһы берәүҙәр фарыз кифаяны үтәй икән, башҡаларҙан был бурыстың төшөүе лә мөмкин. Миҫал өсөн: мосолманды ерләүҙә ҡатнашыу. Әлбиттә, кемдер вафат булғанда уны һуңғы юлға оҙатырға бөтә мосолмандар ҙа бара алмаҫ. Әммә кем дә булһа барырға тейеш бит!

Һәр мосолман мотлаҡ:

1. Хоҙай Тәғәләнең берәү генә булыуына ышанырға, уның атрибуттарын өйрәнергә;
2. Мөхәммәт пәйғәмбәр ғәләйһис-сәләмдең Хоҙайҙың һуңғы илсеһе булыуына һәм уның кешеләрҙе хаҡ юлға баҫтырыуына инанырға;
3. Аллаһы Тәғәләнең һуңғы илсеһе еткергән бөтә ҡарарҙарҙың да Хоҙайҙан һәм ысын булыуына ышанырға;
4. Исламдың төп формулаһын әйтергә (Кәлимәи Шәһәдәт килтерергә), ә был ошолай яңғырай: "Әшһәду әл-ләә иләәһә илләл-лааһу үә әшһәду әннә Мөхәммәдән ғәбдүһүү үә рәсүүлүһ". Мәғәнәһе: "Аллаһтан башҡа һис бер тәңре юк. Хәҙрәти Мөхәммәт Уның ҡоло һәм Илсеһе икәнлегенә таныҡлыҡ бирәм". Был һүҙҙәрҙе әйтеү Ислам динен ҡабул итеү тигәнде аңлата;
5. Көнөнә биш тапҡыр намаҙ уҡырға;
6. Рамаҙан айында йыл һайын ураҙа тоторға;
7. Зәкәт бирергә;
8. Матди мөмкинлеге, һаулығы булған кешеләргә хажға барырға;
9. Алынған килеменең 10 проценты күләмендә ауыр хәлдәгеләргә ғөшөр бирергә;
10. Йома намаҙына йөрөргә;
11. Алдан ҡылынған гонаһтарын ҡабатламаҫҡа;
12. Бөтә эштәрен дә Хоҙайға тапшырып башҡарырға;
13. Ғәҙел булырға, кәрәк ваҡытта ғаиләһен, тыуған илен һаҡларға;
14. Үҙен туйындырырлыҡ, кейендерерлек сараlар табырға;
15. Ата-әсәһен, туғандарын хөрмәт итергә;
16. Дин ҡушҡанса кейенергә;
17. Ислам ҡануундарын ныҡлап өйрәнергә, башҡаларҙы өйрәтергә тейеш.

Әлбиттә, фарыз ғәмәлдәр быны менән генә сикләнмәй. Әле һанап үтелгәндәре - дөйөмләштерелгәндәре иҫәбенән. Мәҫәлән, өйләнешкәндә, урамға сыҡҡанда, үлгәндә, бала тыуғанда һ.б. ваҡиғаларҙа фарыз ғәмәлдәр бар.

Фатима НОҒОМАНОВА,
3-сө синыф уҡыусыһы

# ТӘБИҒӘТТЕ ҺАҠЛАУ - ИМАНДАН



Рәсәйҙең тәбиғәте матур һәм бай. Тәбиғәт матурлығын Аллаһы Тәғәлә кеше өсөн бар иткән. Кешенең тәбиғәткә ҡарап күңеле тыныслана, һоҡлана, ял итә, уны һаҡлағыһы, яраткыһы килә. Ләкин бөтөн кеше лә яҡшы, тәртипле, тәбиғәтте һаҡлаусы, яҡлаусы булмай шул. "Тәбиғәтте бысратыу, кәрәкмәһә лә ағас ҡырҡыу, һындырыу, януар-ҡоштарҙы ҡыҙыҡ күреп кенә үлтереү һәм башҡа ошондай йәмһеҙ һәм ҡурҡыныс эштәр кеше күңелендә иман юҡлыҡтан, уны яратмауҙан килә. Әгәр кешенең күңелендә иман, оялыу булһа, улай эшләмәҫ ине, сөнки ер - йәннәтең бәләкәй генә киҫәге, уны беҙгә Аллаһы Тәғәлә аманат итеп биргән, ә аманатҡа хыянат итергә ярамай", - ти атайым.

Ғаиләбеҙ менән урманға барһаҡ, һәр ваҡыт үҙебеҙҙең артыбыҙҙан сүпте йыйып, усаҡты яҡшы итеп һүндереп ҡайтабыҙ. Олатайыбыҙ: "Ағас ботағын һындырмағыҙ, сәскәне күп итеп өҙмәгеҙ, йылғаға төкөрмәгеҙ, ҡырмыҫҡа ояһын туҙҙырмағыҙ", тип кенә тора.

Беҙ уны тыңлайбыҙ, сөнки тәбиғәтте һаҡлау беҙҙән тора. Ә беҙ быны эшләй алабыҙ.

*Тәбиғәтте һаҡлайыҡ, кешеләр!*
*Яратайыҡ, балалар, тәбиғәтте!*
*Аллаһ беҙгә биргән*
*ул киң рәхмәтте.*
*Тәбиғәтте беҙ һаҡлайыҡ,*
*Шөкөр итеп, бысратмайыҡ.*